## Шиғри тулҡында

Фәүзиә ҠОТЛОГИЛДИНА-АЛТЫНБАЕВА

### РУХИ БАЙЛЫҠ

*Мең шөкөрҙәр итәм, Раббым,*
*Илһамымды биргән өсөн!*
*Һәйбәт булған кешеләрҙе*
*Юлдарыма ҡуйған өсөн!*
*Аңланым мин алтын тауҙың*
*Бер нигә лә тормағанын,*
*Рухи тигән байлыҡтан да*
*Ҙур байлыҡтың булмағанын!*
*Рухи байлыҡ бик ҡиммәттер,*
*Һатылмай ул аҡсаларға,*
*Күңелдә ул тамыр йәйә,*
*Сәсеп булмай баҡсаларға!*
*Быуаттарҙан-быуаттарға*
*Рухи байлыҡ мираҫ булған,*
*Иң ҡәҙерле ошо мираҫ*
*Күңелдәргә дауа булған!*
*Бер нигә лә алыштырмам*
*Иң ҡәҙерле байлығымды!*
*Ул байлыҡ бит тел дә, дин дә,*
*Илем Башҡортостаным да!*

### ЙӘЙЛӘҮҘЕ ҺАҒЫНҒАНДА

Фәтхелҡадир Мостафа улы СӨЛӘЙМӘНОВ (Абдулкадир Инан)

*Ҡайҙа ғына китте беҙҙең күҙҙән*
*Йәйелеп кенә ятҡан йәйләүҙәр?*
*Уйнап-көлөп, йүгереп, тирләп-бешеп*
*Сорҡоратып бейә бәйләүҙәр?*

*Ер дөбөрләп сыҡҡан моңло тауыш*
*Иртә менән йылҡы килгәндә,*
*Күңелемдәге шатлыҡ йөҙгә сығып*
*Ултырған саҡ ҡымыҙ эскәндә?*

*Ҡурайсыны алып, моңландырып,*
*Ултырған саҡ ҡурай уйнатып,*
*Матур аттар менеп, юртып-елеп,*
*Йөрөгән саҡтар Урал буйлатып?*

*Ала юрға егеп, әкрен атлап,*
*Менгән саҡтар тауҙың ташына*
*Ҡәһәр генә төшкөрө был донъяға!*
*Кемдәр етте йәйләү башына?*

*Әйләнәлә үскән матур ҡайын*
*Сыңғыратып та бейә бәйләргә,*
*Йәйләүҙәр ҙә китте, малдар бөттө,*
*Инде ҡалды һағынып һөйләргә.*

*Ожмах, киң, матур, әй йәйләү,*
*Беҙҙең ҡулдан сығып киттең бит!*
*Ник илайһың, башҡорт, ҡуй, илама!*
*Үҙең һатып ашап бөттөң бит!*

**"Шура", 1914, № 24.**

## Әҙәм-әҙәп

### ОЯЛА БЕЛЕҮ!

Мосолман кешеһе өсөн иң мөһим сифаттарҙың береһе - әҙәп һәм оялыу. Әгәр кешеләрҙә әҙәп һәм оялыу, Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡыу булмаһа, тормошобоҙҙоң, көнитмешебеҙҙең тәртибе боҙолор ине. Кеше ҡылған хаталарынан һәм гонаһтарынан оялмаһа, башҡаларҙан тартынмаһа, Аллаһынан ҡурҡмаһа, уны насар, йәмһеҙ эштәрҙән туктатып булмаҫ. Әҙәпле кеше башкалар менән дуҫ, татыу йәшәр, ололарҙы хөрмәт итер, кешеләргә рәхим-шәфҡәт күрһәтер. Ундай кеше үҙен түбәнәйтә торған эштәрҙән алыҫ торор. Выждаты ғазаплаған әҙәм - әҙәпле, күркәм кеше. Ислам дине ҡанундары буйынса, кешегә һис кенә лә гонаһ эшләргә ярамай. Эшләгән икән, тәүбә ҡылыу зарур. Гонаһлы кеше ҡылған гонаһтары өсөн тейешле яҙаһын алаҫаҡ. Аллаһы Тәғәләнән оялыу кешеләрҙән оялыуҙан да өҫтөн, ул кешеләрҙе һәр төрлө яуыҙлыҡтарҙан һәм усаллыҡтарҙан туктатыр.

## Хикәйә

# АЛЛАҺ ТӘҒӘЛӘНЕҢ БАРЛЫҒЫН ИНҠАР ИТКӘН БЕР ТӘКӘББЕР КЕШЕГӘ ИМАМ ӘҒЗӘМ ӘБҮ ХӘНИФӘНЕҢ ЯУАБЫ

Боронғо заманда Бағдад ҡалаһында бер бик билдәле кеше йәшәгән. Уның исеме Имам Әғзәм Әбү Хәнифә булған. Ул бөйөк ғалим булып, һәм уның бик күп уҡыусылары булған. Халыҡ араһында оло хөрмәт ҡаҙанған.

Шул уҡ ваҡытта, үҙен бөтә һорауҙарҙа белдекле һанаған бер тәкәббер бәндә йәшәгән. Ул Аллаһ юҡ тип иҫәпләгән, һәм ҡайҙа барһа ла ошо хаҡта бәхәс күтәргән.

Был һауалы бәндә Әбү Хәнифә хаҡында белеп ҡалған да, уның менән бәхәсләшкеһе килеп киткән. Бағдатка килеп, Әбү Хәнифәне табып, шул уҡ һорауын биргән: "Аллаһ бармы, йә юкмы?" Әбү Хәнифә яуап бирмәгән, тик иртәгеһенә тейешле ваҡытка, билдәләнгән урынға килергә ҡушып, һәм шунда яуап аласағын әйткән. Билдәле булыуынса, ҡаланы икегә бүлеп, Бағдад аша Тигр йылғаһы аға.

Икенсе көндө, билдәләнгән ваҡытта Әбү Хәнифә килмәгән. Тәкәббер бәндә уны бик оҙаҡ көткән һәм инде ҡайтырға йыйынғанда, Әбү Хәнифә килеп сыҡҡан. Тәкәббер: "Ниңә һин һуңланың? Бәлки, минең менән бәхәсләшергә ҡурҡаһындыр!" Әбү Хәнифә уға:

- Юҡ, ҡуркмайым. Һин бит беләһең, мин ҡаланың теге яғында, йылға аша йәшәгәндә. Төндә дауыл йылғалағы күперҙе ағыҙып алып киткән. Мин йылғаға етер сакта, күпер эшсе, төҙөүсе һәм инженерҙарһыҙ үҙе төҙөлһән, тип теләнем. Ағас һәм таштарға үҙҙәре күпер булып төҙөлһән өсөн бойорок бирҙем. Әлбиттә, был бер ни тиклем ваҡытты алды һәм мин бер аҙ һуңланым, әммә барыбер бында килдем, ти.

Тәккәбер:

- Һин алдайһың. Нисек инде күпер үҙ алдына, эшсе, төҙөүсе һәм инженерҙарһыҙ үҙе төҙөлгән ти. Быға аҡылдан яҙған ғына ышаныр, - ти.

Әбү Хәнифә уға:

- Уян, кеше! Һин күпер үҙ алдына төҙөлмәй, тип иҫбатлайһың. Нисек һинеңсә, ошо ғәләм үҙенән-үҙе төҙөлгәнме? Бит ағас япрағы ла үҙ алдына һелкенә алмай. Ә һин әле һаман, бер нәмә лә үҙ алдына, сәбәпһеҙ бар булмағанын аңлай алмайһың, - тип кафыр тәкәбберҙе уйға һалған.

***Дәүләкән ҡалаһы мәсете яҙмаһынан.***

## Сәләмәтлек

# ҺӘР СИРГӘ ДАУА БАР

Йәмил ФАЗЛЫЕВ

Кешеләр һәр ваҡыт: "Мосолманға табипка барыу дөрөҫмө?" - тип һорай. Ошо һорауҙарға яуап йөҙөнән вәғәз һөйләп үтмәксе булам. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд бер хәҙисендә: "Әй, әҙәм балалары, хасталарығыҙҙы дауалағыҙ. Аллаһы Тәғәлә ауырыуҙы яралткас, уның дауаһын да яралтты. Мәгәр бер ауырыуға дауа юктыр, ул ауырыу - ҡартлыҡ", - тине. Тимәк, был хәҙистән күренеүенсә, һәр ауырыуҙы дауаларға тейеш булабыҙ. Һәр сирҙең үҙ дауаһы бар. Тимәк, сирҙе дауалау - сөннәт.

Тағы шундай бер хәҙис бар. "Йоғошло ауырыу булған ергә бармағыҙ, барһағыҙ, унан сыкмағыҙ", - тигән Мөхәммәд пәйғәмбәр. Хәҙрәти Ғүмәр Шам ҡалаһына сәйәхәткә сыккас, унда ваба ауырыуы барын белеп, хәҙисте иҫкә төшөрөп, кире борола: Уға: "Һин тәкдиреңдән ҡасаһыңмы?" - тип һорау бирәләр. Ғүмәр хәҙрәти: "Тәкдирем ҡушканға күрә, мин кире боролам", ти.

"Әҙәм балаларының күбеһе үҙҙәренә бирелгән ике ниғмәтте аңламай алдана. Уларҙың береһе - сәләмәтлек, икенсеһе - эш". "Әҙәм балаһы сәләмәтлегенең дә, үҙенең һау-сәләмәт сағындағы ваҡытының да ҡәҙерен белмәй", - тигән рәсүлебеҙ Мөхәммәд.

Түбәндәге хәҙистә лә фәһемле һүҙҙәр әйтелгән. "Әҙәм балаһына сир килмәҫ, ауырыу килһә, уның гонаһтарына кәффарәт булыр". Сирләйбеҙ икән, беҙҙең гонаһтарыбыҙ аҡлана, Аллаһы Тәғәләнең рәхсәте менән шифа табабыҙ. Бер дарыу бирәүгә килешә, икенсегә - юҡ. Аллаһының рәхсәт итеүе кәрәк. Шуға ла сәләмәтләнеп сығабыҙ икән, "Әлхәмдүлиллаһ!" - тигән һүҙҙәрҙе әйтергә тейешбеҙ. Дарыу эскәк: "Йә, Раббым, шифа бир!" - тип әйтеү зарур.

Мосолманға күп ашау ҙа - зарарлы, сөннәт булмаған эш. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд был хаҡта: "Ашҡаҙанығыҙҙы өскә булегеҙ. Уның бер өлөшөндә - ризыҡ, икенсеһендә - һыу, өсөнсөһөндә һауа булһын", - тигән. Сөнки артыҡ ризыҡ сир булып инә. Сирҙе гонаһ өсөн генә бирелгән ҡаза тип ҡарарға ярамай. Ер йәннәт өсөн бирелгән Аллаһының бүләге булырға ла мөмкин. Хоҙай сир бирә лә уны йәннәтле лә итә. Һаусәләмәт килеш йоҡонан уянаһығыҙ икән, бер көнлөк ризығығыҙ бар икән, һеҙ - донъяның хужаһы. Шөкөр итә беләйек! Аллаһы Тәғәлә һаулыҡ бирһен.

# ҺӘР ҺҮҘЕБЕҘҘЕ УЙЛАП ҺӨЙЛӘЙЕК



Әҙәм балаһы йыш ҡына төрлө хатаға дусар була. Быны Аллаһы Тәғәлә үҙе "кешенең яратылыуы менән көсһеҙ" тип аңлата. Шул уҡ ваҡытта хаталарҙы һәр ваҡыт ғәфү итеп, ихлас тәүбәләребеҙҙе ҡабул ҡылырға әҙер тороуын да әйтә. Һәр кеше үҙенсә уйлап эш иткәнгә һәм ҡайһы саҡта хаталар ҙа булғанға күрә, ғаиләлә йәки коллективта ихтилафтар, ҡаршылыктар барлыҡҡа килә. Был - тәбиғи хәл. Әммә ҡаршылыктар тауыш-ғауғаға килтерергә тейеш түгел. Был мәсьәләне дини йәһәттән бер аҙ яктыртып үтергә булдыҡ.

### ТАМЫРҘАРЫБЫҘҒА ЯМАНЛЫҠ ХАС ТҮГЕЛ

Ғаиләлә атай-әсәйҙең берберенә менән әрләшеүе, төрлө ыҙғыш баланың күңеленә ҙур йәрәхәт һала. Беренсенән, ул донъяның йәмен, наҙын, өлкәндәрҙең мөхәббәтен юғалтһа, икенсенән, шул тәрбиәгә өйрәнеп, буйһоноп, күнегеп үҫә. Ындай ғаиләлә тәрбиәләнеп үҫкән бала күберәк ваҡытын урамда үткәреүсән һәм башка тиңдәштәренә насар үрнәк булып тора. Ата-бабаларыбыҙҙа бер-береһен яманлау осрағы булдымы икән? Насар һүҙ кулланыу аҡыллы кешенең эшеме? Тамырҙарыбыҙҙан айырылып, кемдәргә эйәрәбеҙ? Рәсүлебеҙ: "Кешене әрләү - яманлык", икенсе бер хәҙистә: "Мосолман - шул уҡ кеше, әгәр башка мосолмандар уның ҡулынан да, теленән дә ауырлыҡ күрмәһә", - тигән. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьән Кәримдә иманлы кешеләргә: "Әй, иман килтереүселәр! Берегеҙ икенсегеҙҙе кәмһетеп көлмәһен! ...Бер-берегеҙҙең ғәйебен ғәйбәт итеп һөйләмәгеҙ! Бер-берегеҙгә алама ҡушамат тақмағыҙ!" - тип мөрәжәғәт итә.

### ҮҘЕҢ ЭШЛӘМӘҺӘҢ, БАШҠАНЫ ӨЙРӘТМӘ

Нәсихәт - ул аҡыл өйрәтеү, тип уйлайҙыр күптәребеҙ. Был - ҙур хата. Нәсихәт саф күңеллелек, ихласлыҡ нигеҙендә башкарыла.

Ә һүҙ менән өгөтләү, дөрөҫ юл күрһәтеү - уның бер төрө генә. Нәсихәт әйтеүгә Аллаһы Тәғәлә шундай шарт ҡуйған: "Әй, иман килтергәндәр, ни өсөн үҙегеҙ башкармаған эштәрҙе һөйләйһегеҙ? Аллаһы Тәғәләнең үндәйҙәрҙән күңеле ҡайта". Кеше башкаға нәсихәт әйтә икән, үҙе шул эште башкарған булырға тейеш. Был - раббыбыҙҙың шарты.

Үҙе ҡыл да ҡыбырлатмайынса, башкаларға аҡыл һатҡан кеше нәфрәт кенә уята. Һөҙөмтәлә, асыу итеп, киреһенсә, яманлыҡ ҡылыныуы ихтимал.

Рәсүлебеҙ үҙенә ҡушылған эштәрҙе башкарып, кешегә өйрәткән хәлдә лә: "Өйрәтегеҙ, әммә еңел итеп, ҡыуандырып, бер уҡ кенә нәфрәтләндермәгеҙ!" - тигән.

***(Илдар хәҙрәт ХӘЙРУЛЛИНДЫҢ "Ислам донъяһында мең дә бер һорау" тигән китабынан).***

## БЕЛЕМЛЕ БУЛ

**Ризаитдин Фәхретдиновтың белем, уҡыу мәсьәләләренә ҡағылышлы бик фәһемле фекерҙәренән айырым өҙөктәр булһа ла килтереп үтәйек:**

"Китаптарҙан айырылмағыҙ. Буш ваҡытығыҙҙа яңы китаптар, әҙәби әҫәрҙәр уҡығыҙ. Уҡыһағыҙ, зиһенегеҙ асылыр, аҡылығыҙ артыр, фекерҙәрегеҙ дөрөҫ булыр.

Белем күңел күҙен аса, наҙанлыҡ, караңғылыкты бөтөрә, оло дәрәжәләргә тоташтыра, дошмандарға ҡаршы ҡорал була; тормошто һаҡлай, донъя көтөү сәбәптәрен белдерә, йорт эсендә һәм, ғөмүмән, халыктар менән нисек булырға кәрәк икәнде өйрәтә.

Белем - ғалимдарҙың зиннәте, кешеләрҙең хөрмәте, урланыуынан ҡурҡылмаған мөлкәт, бөтмәй торған байлык, һис бер ваҡыт ғилемгә тәкәбберлек күрһәтмәгеҙ.

Белемдең маҡсаты дәрәжәлә түгел, ә файҙалы кеше булыуҙа. Матур китаптар - ғәжәйеп нәмәләр күренәсәк көҙгә, аулактағы серҙәш, яңғыҙлыкта иптәш, көсһеҙлектә ярҙамсы, хәсрәттәрҙә шатлык килтереүсе, фекерҙәрҙе нурландырыусы, үткән замандарҙың хәлдәрен һөйләп торосы, тарихты хикәйәт итеүсе, аҡыллы кешеләрҙең аҡылдарын күҙгә күрһәтеүсе, хакы арзан, файҙаһы күп нәмә...

Фекерҙәрҙе нурландырасаҡ, холокто пакларға ярҙам бирәсәк, аҡылды арттырасаҡ китаптарҙы һайлағыҙ...

Файҙалы китаптарҙы уҡыу күңелгә шатлык килтерә, фекергә аҙык була, зиһенгә ҡеүәт бирә... Һәр кеше, һәр милләттең бәхетле булыуының төп сәбәбе белемдер".